*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# ҒӘҘЕЛ БҮЛӘКҺЕҢ ҺИН ХАЛҠЫҢА



Сибай институтының гуманитар фәндәр факультеты деканы Илдус Ҡасим улы Бүләков менән электән, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бергә эшләгән саҡтан танышмын. Фән һәм әҙәбиәт ғилеме донъяһында исеме күптән билдәле ғалим өсөн дау килгәндә ҡаушап ҡалмаған ҡыпсаҡ тоҡомло ҡатын. Институтта юғары белем биреү эшен тәрбиә эше менән үреп алып бара икән — был да уға әлмисаҡтан таныш: Ғәҙилә ғүмерҙәрен уҡытыу-тәрбиә эшенә бағышлаған Рәхилә Ирназарова һәм Сибай менталитеты тарыраҡтыр инде, нисек итеп бында килергә йөрәге етте икән, тиеберәк тә уйлап ҡуйғайным. Аҙаҡ институтҡа ҡатыны Ғәҙилә башлап килеүен төшөндөм.

Ғәҙилә Мөдәрис ҡыҙын яҡындан белгән һайын, уның холҡондағы һыҙаттар асыҡлана төштө. Сибай ҡалаһына тәүге ҡарлуғастарҙың береһе булып тап ошо Ғәҙилә килеп төшөүе лә аптыратмай хәҙер. Ул бит Бөрйән районы Ҡыпсаҡ ауылында тыуып үҫкән ҡыҙ! Ирҙәрҙән былайыраҡ һыбай елдергән, яу сапҡан, Мөҙәрис Ғәликәевтарҙың ете балалы ғәиләһендә бишенсе бала булып тыуған.

Әгәр Ғәҙилә Мөҙәрис ҡыҙы институтта башҡарған эштәренән тыш, ҡала, республика кимәлендә лә йәмәғәт эштәрен йөкләүҙе үҙ иңенә ала икән — был да уның тамырҙарынан килә торғандыр: ауыл уҡытыусылары булған ата-әсәһен ул ниндәй генә сифатта күрмәгән! Ауылдың артисы ла, агитаторы ла, идеологы ла улар бит. Улай ғына түгел, көҙ етһә, ырҙын табағында, баҫыуҙа — уҡытыусылар, йәй тағы — бесән, япраҡ әҙерләү...



05-2001.p65 85 30.07.01, 10:44

«Ҡустым менән мине урындыҡҡа күлдәктәребеҙҙән бәйләп ултырта ла китәләр, — тип хәтерләй үҙенең сабай сағын Фәҙилә. — Төйөн ныҡ, сиселек түгел. Улар эштә тип, көн оҙоно бәйҙә ултырғы килмәй бит инде. Һәр хәлдә атай-әсәй килгәндә беҙҙе шыр яланғас көйө иҙәндә туптырлап уйнап йөрөгән килеш күрерҙәр ине. Аптырап ҡалмағанбыҙҙыр инде: күлдәкте төйөнө-бауы менән һыпырып сисәбеҙ ҙә ысҡынабыҙ»...

Фәҙилә Буләкова, үрҙә әйтелгәнсә, Бөрйән районының Ҡыпсаҡ ауылында 1957 йылда донъяға килә. Байназар ауылында урта мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының филология бүлегенә уҡырға инә. Унан һуң Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында аспирантурала уҡый. 1990 йылда «Башҡорт балалар прозаһында заман геройы проблемаһы» темаһына диссертация яҡлай. 1991 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының башланғыс белем биреү методикаһы кафедраһында өлкән уҡытыусы булып эш башлай. 1993 йылдың сентябренән бирле Сибайҙа асылған юғары уҡыу йортонда эшләй.

Юғары белем биреү традициялары формалашҡан, ниндәйҙер кимәлдә хатта ҡалыплашҡан уҡыу йорттарында эшләү менән шул эште үҙең башлау, үҙеңә юл ярыу араһында айырма бәләкәй түгелдер. Етмәһә, Фәҙилә Мөҙәрис ҡыҙына бербереһенән йүнәлештәре менән генә түгел, ғөмүмән, фән булараҡ айырмалы фәндәрҙән уҡытырға тура килә: «Башҡорт фольклоры», «Башҡорт әҙәбиәте», «Хәҙерге башҡорт теле». Буләкова, үҙе уҡытҡан предметтарҙы фән кимәлендә уҡытырға өлгәшеү генә түгел, коллегаларына асыҡ дәрестәр күрһәтергә лә, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондары менән бәйләнеш булдырырға ла, ундағы уҡытыусыларға профессиональ ярҙам күрһәтергә лә ваҡыт таба. Профессиональ йүнәлеш буйынса райондарға сыҡҡанда Фәҙилә Мөҙәрис ҡыҙы ата-әсәләр менән дә осрашырға, йәш быуынға тәрбиә биреү хаҡында улар менән ҡыҙыҡлы әңгәмәләр ойоштороrға ла өлгәшә. Әйткәндәй, Сибай институтында башҡорт филологияһы факультеты кәрәклеге идеяһы бына ошондай осрашыуҙар ваҡытында тыуа. Факультет советына был проблеманы ҡуйыр өсөн ул ныҡлап әҙерләнә. Башҡортостан Республикаһында милли телдәр буйынса закон ҡабул ителеү ҙә булышлыҡ итә быға. Башҡорт теле  рус теле менән бер рәттән дәүләт теле итеп иғлан ителеү факты башҡорт теле буйынса белгестәр әҙерләүҙе яҡшыртыуҙы һәм ҡайһы бер башҡа мәсьәләрҙе хәл итеүҙе талап итә. Башҡорт теле буйынса белгестәр әҙерләү бигерәк тә Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш төбәге өсөн актуаль булыуын Фәҙилә Буләкова түбәнге дәлилдәр аша күрһәтә:

1. Республикалағы саф башҡорт мәктәптәренең күбеһе ошо төбәктә;
2. Был мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытҡан уҡытыусыларҙың 25-30 процентының юғары белеме юҡ;
3. Рус мәктәптәрендә башҡорт телен предмет буларак өйрәнеүҙе индереү ҙә башҡорт теле уҡытыусыларына булған ихтыяжды арттырҙы.

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш төбәге өсөн кадрҙар әҙерләү маҡсатында асылған һәм инде ун йыл эшләп килгән Сибай институтында быға тиклем башҡорт теле буйынса белгестәр әҙерләүгә иғтибар ителмәне. Сибай институты директоры Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йөрмөхәмәтовтың ярҙамы һәм Башҡорт дәүләт университеты һәм хөкүмәт етәкселеге аңлауы арҡаһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы асылды, Фәзилә Мөҙәрис ҡыҙы, доцент буларак, кафедраға етәксе итеп тәғәйенләнде.

Фәҙилә башланғыс һәм мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреү йүнәлешендә эшләгәнендә лә факультетта филология рухы бөркөлөп торҙо: «Инеш» исемле әҙәби ижад түңәрәге эшләне, Сибай яҙыусылар ойошмаһының бюро ағзағы буларак, ҡалын әҫәрҙәрҙе тикшергәндә

һуңғы һүҙҙе Бүләковтар әйтте; Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театрындағы премьералар хаҡында авторҙар ҡатнашлығында институт кимәлендә әңгәмәләр, конференциялар уҙғарылды; яңы сыҡҡан хикәйә, повесть, романдар төплө баһа алды. Хәтеремдә, минең дә «Бөйрәкәй» романы, «Төштәге йыр» драмаһы буйынса институтта пресс-конференция үтте. Дүртәр сәғәткә һуҙылған был һөйләшеүҙәрҙән мин лысма һыу булып сығыр инем — талиптарҙың биргән һорауҙарының етдилеге, төплөлөгө еңел-елпе яуапҡа урын ҡалдырмау шулай иткәндер инде. Ғөмүмән, Fәҙилә Мөҙәрис ҡыҙының үҙ-үҙенә бикләнмәйенсә, фән, әҙәбиәт һәм тәрбиә мәсьәләләренә бер бөтөн итеп һәм киң аспектта ҡарап эш алып барыуы үҙе һәм эш урыны тирәһендә алсаҡ, ышаныслы аура булдырырға булышҡандыр. Үҙенең йәшәү кредоһын ул талиптарға тәрбиә мәсьәләһендә лә беренсе урынға ҡуя: «Студентҡа белем биреү өсөн уға иң элек кеше итеп ҡарарға кәрәк, — ти ул. — Әҙәбиәт уҡытыусыһына иһә бигерәк тә».

Fәҙилә Мөҙәрис ҡыҙы студенттарҙы китап һөйөүсе итеп тә күргеһе килә. Шуға күрә лә дәрестәрендә яҙыусыларыбыҙҙың уҡымлы әҙәрҙәрен ҡулланырға тырыша. «Әҙәбиәттән һыуындыра торған әҫәрҙәр ҙә етерлек, үкенескә ҡаршы, — ти ул. — Әҫәр студенттың күңеленә етһен өсөн дәрестә башлыса үҙем уҡыйым. Хәҙер инде мин тасуири уҡыу оҫтаһына әүерелеп бөттөм».

Аралашып йәшәү дәүерендә ирле-ҡатынлы Бүләковтарҙы бәйләгән уртаҡ сифаттар, маҡсаттар берлеге булһа ла, характерҙары менән уларҙың бөтөнләй төрлө икәнен төшөндөм. Тәрән үҙән тултырып, тыныс ҡына, һәлмәк аҡҡан йылға кеүек Илдус Ҡасим улы Бүләков һәм шул һыу өҫтөндә дөрләп торған усаҡтай Fәҙилә. Әммә утты ла, һыуҙы ла Хоҙай яратҡан, ерҙәге тереклеккә шуларҙы баш ҡылған, икеһе ике төшөнсәне биргән ике есемде яраштырған, улай ғына түгел, икеһен мәңге сиселмәҫлек итеп мөхәббәт төйөнө менән бәйләгән. Ошо ҡауышыуҙан Бүләковтар ғәиләһендә буйсан һәм уйсан, аҡыллы һәм сабыр Илнур егет тыуған, үҫеп буйға етеп килә.

Fәҙилә Мөҙәрис ҡыҙының педагоглыҡ эшмәкәрлеге өйөндә лә дауам иткәндәй: студенттар йә кәңәш, йә китап һорап килә, фәкерҙәштәре, рухташтары йыйыла. Бер-береһен аңлап, берен-бере тултырып йәшәгән, ғилми мөхиткә сумған ғаиләлә тәрбиәләнгән улдары Илнур ҙа урта мәктәпте тамамлау менән ата-әсәһенең юлын ҡыумаҡсы. Эҙмә-эҙлелек, ныҡышмалылыҡ, эшсәнлек тәрбиәләгән улар улдарында. Уға ҡарайһың да, ғүмерен әҙәбиәткә бағышлар таңдарында Илдус Ҡасим улы үҙе лә нәк Илнур кеүек булғандыр, тип уйлап ҡуяһың.

Fәҙилә Бүләкованың хәҙер утыҙҙан ашыу ғилми хеҙмәте бар. Fилми багажы байтаҡ ҡалынайған йәш ғалимә инде докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләй башлаған. Fалимә, уҡытыусы, йәмәғәтсе, ир ҡатыны, әсә... Республиканың төпкөл районы Бөрйәндән сыҡҡан заман ҡатынының бөгөнгө портреты ошондай. Былар ҙың барыһына ла бер юлы өлгәшеү, әлбиттә, уға еңел булмағандыр. Әммә булмышына яу сабыр ҡатын-ҡыҙҙар саялығы һалынған Fәҙилә Бүләкова барыһын да үҙенең генә түгел, халҡының ырыҫы итеп күтәрә. Исеменә уның есеме лә тап килә бит: халҡы өсөн ул ҡәҙерле бүләк — ғәҙел бүләк.



05-2001.p65 87 30.07.01, 10:44